**Диктант текстары** **9-сы класс**

## МОҢ

Кешегә ғүмер итеү өсөн һыуҙан, һауанан, уттан, ерҙән ҡала иң кәрәкле шарттарҙың береһе – моң. Моң кешене елкендерә, илһамландыра, дәртләндерә, күңелгә ҡанат ҡуя, һағыш уята, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир итә. Шуның өсөн кеше ятраҡан йырын тыңлағанда, йөҙө балҡып, күҙ ҡараштары нурланып, хатта маңлай һырҙары яҙылып китә.

Әгәр кеше үҙ мейеһендә, күңел донъяһында барған фекерҙәр сыуалышын күрә алһа, ике тапҡыр бик ныҡ ғәжәпләнер ине. Беренсе тапҡыр – уларҙың бихисап иҫәбенә, туҡтауһыҙ хәрәкәтенә, күҙ эйәрмәҫ тиҙлегенә, икенсе тапҡыр – кешенең күңеле моңға тулған мәлдә, уларҙың бер тәртипкә инеп, талғын ғына аға башлауына. Тап бына ошо арауыҡта, уй-кисерештәр бер йүнәлештә аҡҡан саҡта, кешенең күңеле ял итә, сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһала. Шуның өсөн тәбиғәт моң-матурлыҡ яралтҡан донъяға. Таң һыҙылып атыуы, ҡояш ҡалҡыуы, көн тыуыуы, шишмәләрҙең сылтырап ағыуы, күҙ ҡамаштырырлыҡ төрлө сәскәләрҙең керпек ҡағып алыуы, мөғжизә өсөн яратылған күбәләктәрҙең леп-леп осоуҙары, ярыша-ярыша ҡоштар һайрауы, бихисап йондоҙҙарҙың баҙлауы...

(М.Бураҡаева)(142 һүҙ)

## МОҢ

Кешелек донъяһы үҙе бар иткән моң-тойғоноң тәьҫире лә ғәжәйеп көслө. Улар – йыр, көй, рәсем-һүрәт, күңелдә ҡалған бәхетле минуттар, моңһоу айырылышыуҙарҙан һуң йылылыҡ бөркөп торған осрашыуҙар.

Моң – тәбиғәттең иң ғәжәп мөғжизәләренең береһе. Ул беҙ күҙ алдына ла килтермәгән көскә эйә. Моң тәьҫирен донъя фәне яңы-яңы ғына өйрәнә башланы. Әммә фәнни күҙлектән яңы өйрәнеү кешелек донъяһының был хаҡиҡәтте ошоғаса белмәүе тигән һүҙ түгел.

Кешеләр моңдоң, зиһендәге барлыҡ күҙәнәктәргә үтеп инеп, бөтә булмышына тәьҫир итеүен яҡшы белгән һәм сәләмәтләндереү сараһы итеп тә

файҙаланған. Үҙҙәре лә моңланған, йырлаған, йыр менән күңел асҡан, ҡайғы тараҡкан, күңелдәрҙе берләштергән, йыр менән еңеүҙәр яулаған.

Моң рухландырыусы, күңелдәрҙе берләштереүсе көскә эйә булыуы менән дә кешелек донъяһы йәшәйешенә ыңғай йоғонто яһай. Шуның өсөн гимндар, марштар ижад ителә. (М.Бураҡаева) (121 һүҙ)